# Абдулхаҡ Игебаев

# Йомарт уңыш

Тирә - яҡты  байҡарға
Төбәгәйнем  ҡараштым
Күҙ биҙәктәрен күреп
Ҡапыл күҙҙәр ҡамашты



Хайран ҡалдырҙы мине
Йомарт ерҙең бүләге:
Ул һутлы йәшелсәһе,
Төрлө емеш-еләге.



Ана,суғылйым йөҙөм
Үрелгән үрмә гөлдәй,
Тәлгәштәрен бәүелтеп,
Елдәргә серен һөйләй.



Алһыуланып-алланып,
Балланып бешкән алма,
Бына хәҙер тупылдап,
Ул төшөр кеүек алға.



Суҡ балан, хозурланып,
Көн сыуағына баҡҡан,
Һәр бер ботағы һайын
Ҡыҙыл муйынсаҡ таҡҡан



Ҡарбуз нәҡ шар шикелле,
Тышында-йәшкелт юлаҡ.
Эсе ҡып-ҡыҙыл ғына,
Тәме татлы бал һымаҡ.



Табаҡ дәүмәле булып,
Ергә һырышҡан ҡабаҡ,
Итләс итен тәмләһәң,
Ашағың килер ҡабат.



Ҡат-ҡат тунға уранып,
Йомарланып,ҡауһайып,
Ҡарыш буйлы кәбеҫтә
Шым ултыра маһайып.



Түп- түңәрәк башына
Алтын иләген кейеп,
Көнгә һуҙып муйынын,
Көнбағыш тора көлөп.



Ҡалын тиреле шалҡан
Ултыра ойоп ҡына,
Үҙе үҫкән тупраҡтың
Йылыһын тойоп ҡына



Ай-һай, уңған баҫыуҙа
Татлы тамыр – сөгөлдөр...
Йыл да мул уңыш бирә
Беҙҙең гүзәл тыуған ер!

